1

Ҡобайыр
(өҙөктәр)

Айҙындан ай ерендә,
Вайҙындан Нуғай ерендә,
Тамьяндың илендә,
Данды кыпсак ерендә.
Урал тауҙай тау булмаһ,
Урал тауҙай тау булмаһ,
Ҡалаға ингән бур булмаһ,
Хеҙмәт иткән хур булмаһ,
Ҡаҙылай илдәй ил булмаһ,
Ҡасмайык, туғандар, касмайык,
Кем һәләй һәллеуәләй!

Старшина Мәсәғүт,
Старшина Мәсәғүт
Ары ла тороп әйтте ти,
Бире лә тороп әйтте ти;
Указ ҙа килгән беҙҙәргә,
Указ ҙа килгән беҙҙәргә
Атанан тоҙ алырға,
Батшалыкка калырға.

Ошо иғлан таралһын
Тамьян, Бәрйән кыпсакка,
Күрше яткан Аппакка,
Иәр юлдашым һуппакка,
Өндәй-ҙөндәй Букәүерең
Кем Аккалпакка,
Кем һәләй һәллеуәләй!

Алланың көҙрәте шундайҙыр,
Алланың көҙрәте шундайҙыр:
Бер алты айҙы жәй иткән,
Бер алты айҙы кыш иткән;
Түше сыбар көйгәнәктең
Сыбар-ала йоморткаһын.
Аунап-сорнап кош иткән;
Ураҙсының алты улын
Алтыһын да бай иткән;
Кейгәнен ебәк менән камһы иткән,
Менгәнен арғымак менән юрға иткән,
Беҙҙе тапкан әбсәбеҙ
Урап-сормап кеше иткән;
Кем һәләй һәллеүәләй!
/Ни ҙә һәйҙәй телдән һуң
Түш арытып бикәһен
Өндәйгә кимәй емдән һуң,
Кем емдән һуң,
Кем һәләй һәллеүәләй/.
Алланың көҙрәте шундайҙыр,
Алланың көҙрәте шундайҙыр:
Берәүҙең яңғыҙ ғынаһын
Иә хоҙайым тигәндә
Яңғыҙ башын юк иткән,
Кем һәләй һәллеүәләй!

Алланың көҙрәте шундайҙыр,
Алланың көҙрәте шундайҙыр:
Өҫтөңдәге
Камва тун
Сепрәк булып туҙғанһың,
Курай ҙа булып һулғанһың;
Түрҙә утырған быйбырың.
Түрәлектән яҙыр кем йәштән һуң,
Түрәлектән яҙыр кем йәштән һуң,
Кем һәләй һәллеүәләй!

Алланың көҙрәте шундайҙыр,
Алланың көҙрәте шундайҙыр:
Әтәлге коштар мактанһа,
Күлдән дә һокһор типтем тип,
Күлдән дә һокһор типтем тип,
Кем һәләй һәллеүәләй!

Берәүҙең яманы мактанһа,
Берәүҙең инеп кигәндә
Битенән эттәй каптым тир,
һин яманың ғәйебен
һәллеүәләй таптым тир,
Тундан да былай яптым тир,
Кем һәләй һәллеүәләй!

x x x

- Ауыҙы бар көйшәмәҫ -
ул ни булыр, сәсәнем?
Арҡаһы бар аунамаҫ -
ул ни булыр көрҙәшем?
Ҡамыш төбө ике айыр -
ул ни булыр , сәсәнем?
Екән төбө ете айыр -
ул ни булыр серҙәшем?

- Ауыҙы бар көйшәнмәҫ -
йылҡы тигән түгелме?
Арҡаһы бар аунамаҫ -
һыйыр тигән түгелме?
Ҡамыш төбө ике айыр -
атаң-әсәң булмаҫмы?
Екән төбө ете айыр -
ете ағаң булмаҫмы?